# ӘСӘ. ҠАТЫН. ҒАЛИМӘ.



*Фәнүзә Айытбай ҡыҙы Нәҙершина 1936 йылда Ауырғазы районының Мораҙым ауылында тыуған. Мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ педагогия училищеһын, аҙаҡ ошонда уҡ педагогия институтын тамамлай. Тыуған ауылында рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, мәктәп директоры, комсомолдың Ауырғазы район комитетының мәктәптәр бүлеге мөдире булып эшләй. 1962 йылда, аспирантура тамамлағандан һуң, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй башлай. Башҡорт фольклорының тарихи прозаһын, поэзияһын һәм афористик жанрҙарын өйрәнеүгә ҙур өлөш индерҙе. 18 китап (2 монография, ғилми йыйынтыҡтар), күп һанлы мәҡәләләр авторы. Китаптары: «Халыҡ һүҙе» (1983), «Халыҡ хәтере» (1986), «Башҡорт халыҡ ижады» серияһынан башҡорт һәм рус телдәрендә: «Йомаҡтар» (1979, 1993), «Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» (1980, 1993), «Риүәйәттәр, легендалар» (1980, 1987, 1997). Айырым (шәхси) план буйынса әҙерләнгәндәре: «Рухи хазиналар» (1992), «Башҡорт халыҡ көйҙәре, йырлы-бейеүле уйындар» (1996), «Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре» (1997, башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә) һ.б. Күренекле ғалимә, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәнүзә Нәҙершина менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ фән, әҙәбиәт, сәнғәт донъяһы, тормош, ғаилә бәхете, йәшәү мәғәнәһе хаҡында.*

**— Фәнүзә Айытбаевна, һеҙ ауылда ябай крәҫтиән ғаиләһендә тыуып үҫкән бала. Фән донъяһына һеҙҙе нимә тартты? Унда килеүегеҙгә нимәләр сәбәпсе булды?**

— Фән — ҙур фиҙакәрлек талап иткән өлкә. Ғилми эш менән шөғөлләнеү — ул арымай-талмай уҡыу, белем серҙәренә төшөнөү. «Хоҙайым, балама тел асҡыстары бир!» — тип теләйҙәр ине атайым менән инәйем уҡыған йылдарымда. Әллә теләктәре ҡабул булды?.. Һәр ваҡыт уҡыу, белемгә ынтылыу фән юлына алып килгәндер, моғайын.

Халыҡ ижады, йәғни әкиәттәребеҙ, йыр, ҡобайырҙарыбыҙ — әҙәбиәттең нигеҙ ташы, бер үк ваҡытта яҙылмаған тарихыбыҙ ҙа. Һәр ауыл балаһы шикелле, мин дә йыр, әкиәт тыңлап үҫтем. Атайым — Айытбай Минебай улы йырлар, ҡурай уйнар ине. Инәйем — Минисара Әбделвәхит ҡыҙы шулай уҡ йыр яратты, үҙе тапҡыр һүҙле булып, ике һүҙенең береһендә мәҡәл булыр ине. Ҡыҫҡаһы, фольклор минең өсөн бер ҡасан да ят бауыр булманы. Әммә йәштән үк фольклорсы булырға хыялландым тиһәм, ике йөҙләнеү булыр ине. Дөрөҫөн әйткәндә, мин Өфөгә Лев Толстойҙың «Һуғыш һәм солох» романындағы Наташа Ростова образы, йә булмаһа Джон Голсуорсиҙың «Һуңғы глава» әҫәрендәге Динни образы буйынса ғилми эш яҙырмын тип, аспи-



05-2001.p65 163 30.07.01, 9:49

рантураға инергә килдем. Хаҡ юлға атаҡлы Жәлил Кейекбаев баҫтырҙы. Ул миңә: «Толстойҙы йә Голсуорсиҙы өйрәнергә урыҫтар, англичандар бөткән тиһеңме әллә? Үҙебеҙҙең башҡорт фәнендә өйрәнәһе өлкәләр бихисап», — тине ябай, ләкин ҡәтғи генә итеп. Уның һүҙе миңә ныҡ тәьҫир итте. Ағайҙың кәңәшен тотор-ға тигән ҡарарға килеп, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының аспирантураһына йүнәлдем. Шул көндән яҙмыш мине Кирәй Мәргән, Әхнәф Харисов һәм башҡа бик күп арҙаҡлы шәхестәр менән осраштырҙы. Кирәй Мәргән ғилми етәксем булды.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына 1959 йылдың аҙағында килгәйнем — әле булһа шундамын. Фәндәр академияһына ҡараған абруйлы институтта эшләү — шатлығым да, горурлығым да. Институттан тыш, минең өсөн ҡәҙерле һәм бик тә яҡын ике урын бар. Ул — Башҡортостан радио-телевидениеһы һәм «Китап» нәшриәте. Телевидение 1984-90 йылдарҙа «Йыр тарихы — халыҡ тарихы» тигән авторлыҡ программамды, минең сценарийым буйынса төшөрөлгән ике фильм күрһәтте. Башҡа тапшырыуҙарҙа ла ҡатнаштым. Ә нәшриәт инде минең барлыҡ китаптарымды тиерлек халыҡҡа еткерҙе.

**— Фәнүзә Айытбаевна, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса юғары белем алып, башҡорт фольклоры буйынса уҡып һәм эшләп китеүе ауыр булманымы?**

— Юҡ. Сөнки мин ете йыл башҡорт мәктәбендә уҡыным. Педучилищела һәм институтта ла башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытылды. Туған телемә, әҙәбиәткә һөйөү уятыуҙа мәктәп уҡытыусым Әмерхан Исхаҡ улы Кильдинға ғүмерем буйы рәхмәтлемен. Бәләкәйҙән шиғыр яраттым. Ғәлимов Сәләмдең, Рәшит Ниғмәтиҙең оҙон-оҙон поэмаларын, Хәниф Кәримдең шиғырҙарын ятлап, мәктәптә, ауыл клубы сәхнәһендә һөйләй торғайным.

**— Әҙәбиәт, шиғриәт донъяһына барып ингәс инде, әйҙәгеҙ әле тәрәнгәрәк үтәйек. Күңелгә һеңгән, ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайтып уҡый торған, уҡыған һайын яңыса асыла торған әҫәрҙәр була...**

— Эйе, әммә мин бер уҡыған әҫәргә ғәҙәттә ҡабат әйләнеп ҡайтмайым. Филологтарға былай ҙа бик күп уҡырға тура килә... Әлбиттә, яратҡан яҙыусыларым да, яратҡан әҫәрҙәрем дә аҙ түгел. Әлегерәк, ғүмеремдең бер болоҡһоу мәлендә, Мария Ремарктың «Үтескә алынған ғүмер» һәм «Өс иптәш» тигән әҫәрҙәренең рухымды күтәреп ебәргәнен хәтерләйем. Улар аша мин йәшәүҙең йән өҙгөс ҡәҙерле нәмә булыуын айырыуса ныҡ аңлағайным. Ошо тойғоно Мостай Кәримдең «Һуңғы бүләк» шиғырын һәм «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәрен уҡығанда ла кисерҙем. Бер уйлаһаң, ғәжәп инде: ике дәүерҙә, ике мөхиттә, ике төрлө милләт әҙиптәре тарафынан ижад ителгән әҫәрҙәр. Улар араһында тематик яҡтан бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ, әммә тормош күренештәрен һүрәтләү, фекерләүҙә яһалма фәлсәфәнең булмауы яғынан уртаҡлыҡ бар. Тәрән гуманистик йүнәлешле булыуҙары менән күңелемә яҡын. Хәҙер уҡыһам, Ремаркты нисек ҡабул итер инем — әйтә алмайым. Бер йылға ике ҡабат инеп булмай, тиҙәр бит...

Дөйөм алғанда, миңә тарихи, фәлсәфәүи йөкмәткеле әҫәрҙәр оҡшай. Хатта поэзияла ла. Мостай Кәримдең «Ҡара һыуҙар», Рәми Ғариповтың «Табыныу», Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ» поэмаларын ғына алып ҡарағыҙ. Уйлаһаң, юғары шиғриәт теле менән яҙылған ошо өс поэмаға тотош бер быуат үҙе һыйған бит. Һәр хәлдә — уның иң эре фажиғәләре: һуғыш, репрессиялар, экология торошондағы хәлдәр.

**— Шиғыр, шиғриәт тигәндә, ғәҙәттә мөхәббәт лирикаһы күҙ алдына килә.**

— Мөхәббәт темаһына яҙылған шиғырҙарҙың дәфтәр поэзияһы кимәленән үтә алмағандарын тәбиғәтем ҡабул итмәй. Ә бына Рәшит Назаровтың «Йөрәк» шиғыры — шедевр. Шундай камил булғанда ғына мөхәббәт лирикаһы ялҡытмай, авторының исеме менән хәтерҙә ҡала.

**— Фәнүзә Айытбаевна, сәнғәткә битараф түгелһегеҙ — беләм. Йырлағанығыҙҙы ла ишеткәнем бар. Иҫ киткес моңло тауыш. Йырсы булыу теләге булманымы?**

— Юҡ, булманы. Мин мәктәп йылдарынан башлап тарихсы булырға хыялланаы инем. Педучилищела уҡығанда рус әҙәбиәтенә ғашиҡ булдым.



05-2001.p65 164 30.07.01, 9:49

Унда беҙҙе Зоря Моисеевна Минц тигән ифрат көслө уҡытыусы уҡытты. Шуға ла институтҡа ингәндә филология факультетын һайлауым осраҡлы түгел ине. Бәхеткә күрә, беҙ уҡыған йылдарҙа факультет тарих-филология факультеты тигән статусҡа ла эйә булып алды. Шунлыҡтан институтта әҙәбиәт, тел ғилеме менән бер ҡатарҙан тарих, политэкономия фәндәре буйынса ла белем биреү ярайһы уҡ юғары кимәлгә ҡуйылғайны. Киң профилле белем алыу минең киләсәк тормошом өсөн бик тә отошло булды, сөнки тәү ҡарашҡа ябайыраҡ күренгән фольклор ғилеме асылда үтә лә ҡатмарлы. Тарихи, фәлсәфәүи ҡарашһыҙ был донъяға инеү файҙаһыҙ.

Ә инде сәнғәткә битараф булмауым, йыр яратыуым хаҡында әйткәнегеҙ хаҡ. Йырһыҙ, шиғырһыҙ йәшәүемде күҙ алдына килтерә алмайым.

Балет, опера сәнғәтенә мөхәббәтем ҙур. Мин аспирантурала уҡыған йылдарҙа Гүзәл Сөләймәнова, Хәләф Сәфиуллин, Зәйтүнә Насретдиноваларҙың сәхнә йондоҙҙары булып балҡыған сағы. Шул саҡтарҙа опера, балет спектаклдәренең береһен дә ҡалдырмай ҡарап бара торғайным. Штраустың «Зәңгәр Дунай»ын нисә тапҡыр ҡуйһалар, шунса тапҡыр ҡараным, буғай. Аспирантурала уҡығанда Мәскәүгә йыш барыла ине. Ҙур театрҙа Лемешев, Огнивцев, Лисициандарҙың сығышын тыңлау бәхете тейҙе. Екатерина Максимова менән Владимир Васильевтың балеттағы тәүге дебюттарын да күрергә тура килгәйне (С.Прокофьевтың «Таш сәскә» балетында). Һәр нәмә сағыштырыуҙа беленә бит. Эс бошҡан саҡтар ҙа булманы түгел. Әйтәйек, ҡаҙаҡ йырсыһы Серкибаевтың Мәскәүҙең оло сәхнәләрендә сығыш яһауын һоҡланып ҡабул итеү менән бер рәттән, моң төйәге булған Башҡортостан йырсыларының ул ваҡытта әле күренмәүе кәйефте ҡыра ине. Хәҙер, аллаға шөкөр, Мәскәүҙә генә түгел, донъя күләменә сыҡҡан Абдраҙаҡовтар, Светлана Арғынбаеваларыбыҙ бар. Вәхит Хызыровтың да мөмкинлектәре ҙур. Унық йырлау стиле, үҙен сәхнәлә тотошо — юғары профессионализм һыҙаттарының сағылышы. Әммә йырсының көлкө сюжетлы драма элементтарына ҡоролған телевидение тапшырыуҙарында ҡатнашыуын хупламайым, сөнки был уға килешеп етмәй кеүек.

**— Әсә. Ҡатын. Ғалимә. Ошо өс төшөнсә һеҙҙә нисек үҙ-ара һыйышып йәшәй? Улар бер-береһенә ҡамасауламаймы?**

— Төрлө саҡтар булды инде. Ғаилә менән фәнде бергә алып барыу, әлбиттә, бик еңел түгел. Тик мин зарланырға яратмайым. «Ауыҙың тулы ҡара ҡан булһа ла, кеше алдында төкөрмә», — ти торғайны әсәйем. Шуны ғына әйтә алам. Фән кандидаты, йә докторы булайым тип, бер ҡасан да әсәлек бурысымды ситкә ҡуйып торманым. Шул уҡ ваҡытта яратҡан эшемде лә ҡыйырһытҡым килмәне. Йоҡо, ял көндәре иҫәбенә булһа ла үҙемә йөкмәтелгән бурысты үтәргә тырыштым. Ғаилә татыулығы ла быға ярҙам иткәндер, моғайын. Ирем — Михаил Созинов (ул рус кешеһе ине), ҡулынан килгәнсә, эшләр өсөн миңә һәр саҡ уңай шарттар тыуҙырырға ынтылды. Ғөмүмән, беҙ Миша менән бер-беребеҙҙе аңлап ғүмер иттек. Мине һәм минең йөҙөмдә милләтемде күреп, хөрмәт тойғоһон белдереүҙән тартынмай йәшәне. Ул бик тә изге күңелле, ғәҙел, саф кеше ине.

Ике ҡыҙ үҫтерҙек. Икеһе лә юғары белем алдылар. Оло ҡыҙым Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең биохимия һәм генетика институтында әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәр, биология фәндәре кандидаты. Кесе ҡыҙым БДПУ-ның сит ил телдәре факультетын тамамлап, тәүге йыл ғына университетта эшләп йөрөй. Үҙем ата-инә мөхәббәтенә сорналып үҫкәнгәмелер, бала йәнлемен. Балаларым — күҙ ҡараларым.

**— Фәнүзә Айытбаевна, Һеҙ халыҡ ижадын йыйыу маҡсатында Башҡортостандың арҡырыһын-буйын әйләнеп сыҡтығыҙ. Башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙе лә ҡалдырманығыҙ. Үҙегеҙҙең фәнде пропагандалап, сит илдәрҙә лә сығыш яһанығыҙ. Шул хаҡта бер нисә һүҙ әйтеп китегеҙсе.**

— Үкенескә ҡаршы, Башҡортостанда мин аяҡ баҫмаған ерҙәр ҡалды әле. Сит илгә лә артыҡ күп йөрөргә тура килмәне. Төркиәнән күп тапҡырҙар саҡырыу алһам да, төрлө сәбәптәр арҡаһында бара алманым. Буласаҡ докладымдың



05-2001.p65 165 30.07.01, 9:49

ҡыҫҡаса йөкмәткеләре унда баҫылып сыҡты сығыуын. Улар инглиз телендә нәшер ителгәнлектән миңә артабан Англияға барыу мөмкинселеге тыуҙы: күп тә үтмәй Эдинбург университеты үткәргән «Каспий—Урта Азия, 1994» исемендә үткән халыҡ-ара фәнни симпозиумға саҡырыу алдым. 1995 йыл фин-уғыр халыҡтарының Финляндияла уҙғарылған VIII Бөтә донъя конгресында ҡатнаштым. Сит илгә сығыу, үҙегеҙ беләһегеҙ, арыу ғына сығымдар талап итә. Ошо уңайҙан Өфө «Синтезспирт» акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Әҙип Фәтхелбаян улы Баһмановҡа, Башҡортостан Республикаһының фән, юғары һәм профессиональ белем биреү буйынса дәүләт комитетының ул саҡтағы рәйесе Роберт Әсхәт улы Яҡшыбаевҡа рәхмәтлемен.

Конгрестарҙа ҡатнашыуҙан алған тәьҫораттар тәңгәленә килгәндә, шуны әйтә алам: ғалимдар — ҡайҙа ла ғалим, улар бер-береһенә оҡшаған. Һәр ҡайһыһы, үҙе тикшергән өлкәгә мөккиббән китеп, тулҡынлана-тулҡынлана ҡәләмдәштәрен үҙ асыштары менән таныштыра. Сит илдәрҙә сығыш яһағанда мин дә донъя кимәленә күтәреп сығарырлыҡ тарихыбыҙ, фольклорыбыҙ барлығына, уға ҡарата сит ил ғалимдарының иғтибар һәм ихтирам күрһәтеүенә сикһеҙ ҡыуандым һәм ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙем. Фольклор әҫәрҙәренең танып-белеү әһәмиәте ифрат та ҙур бит ул. Йыш ҡына бер ниндәй архивтан да табып булмай торған мәғлүмәттәрҙе уларҙан алаһың.

Әйткәндәй, халыҡ-ара форумдар үҙебеҙҙең илдә лә булып тора. Уларҙа ла ҡатнаштыҡ.

**— Фәнүзә Айытбаевна, халыҡ ижадын хәтерендә йөрөткән өлкән быуын кешеләре аҙ ҡалып бара. Фольклористика шуға бәйле үҙгәрештәр кисерергә мәжбүр булмаҫмы? Йәш фольклорсы ғалимдар эшһеҙ ҡалмаҫмы, йәки ғилми эштәрен ниндәйерәк йүнәлешкә ҡорорҙар?**

— Халыҡ ижады нигеҙҙә ике формала йәшәй: телдән (был уның тәбиғи формаһы) һәм китап биттәрендә. Хәҙерге заманда уның беренсел йәшәү рәүеше тарайҙы. Әйтәйек, электр уты булмаған, радио-телевидение төшкә лә инмәгән саҡтарҙа төндәрен әкиәт һөйләшеү, йомаҡ ҡойошоу гәҙәти күренеш булған. Элек хатта сәсәндәр йомаҡ әйтешеп, майҙандарҙа тапҡырлыҡта ярышҡандар. Ә хәҙер ижадтың был төрө тик балалар араһында ғына таралған тиерлек. Уның ҡарауы күләмәс жанры бик үтемсел булып китте: ул телдән дә, китап, газета биттәренән дә төшмәй. Элекке таҡмаҡтарҙы яңыртып йырлау осраҡтары күҙәтелә. Ҡыҫҡаһы, фольклор үҙенең йәшәүен дауам итә. Йәш ғалимдар эшһеҙ ҡалмаҫ, тием. Ә инде ғилми эштәрҙең йүнәлеше фәндең хәҙерге торошона бәйле.

**— Башҡорт фольклор ғилеменең хәҙерге торошо нисек һуң? Уның алдында киләсәктә ниндәй бурыстар тора?**

— Беҙҙең аҙ ғына һанлы фольклорсыларыбыҙ бөгөнгө көнгә халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыу, баҫтырып сығарыу, ғилми өйрәнеү йәһәтенән ғәйәт күп эш башҡарҙы. Томдар артынан томдар сыҡты. Монографиялар яҙылды. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әле яңынан күп томлыҡ баҫма әҙерләү буйынса эш башланды. Төп иғтибарҙы ҡомартҡыларҙы баҫтырып сығарыуға йүнәлтеү, әлбиттә, теоретик хеҙмәттәр яҙыуға ваҡытты аҙ ҡалдыра. Мифологияны тәрәндән өйрәнеү, жанрҙар поэтикаһын тарихи планда тикшереү көнүҙәк бурыстарҙың береһе булып ҡала. Башҡорт фольклорын донъя фольклоры мөхитендә ҡарау өсөн дә мөмкинлектәр юҡ түгел хәҙер. Әкиәттәр, риүәйәт, легендалар, эпосты сағыштырма өйрәнеүҙә уңышлы башланғыстар бар. Уларҙы хәҙер дауам итергә кәрәк. Әйтәйек, «Урал батыр» эпосын «Гильгамеш» менән генә сағыштырып өйрәнеү етмәй. Борон-ғоларҙан боронғо мотивтар менән һуғарылған был әҫәрҙе төрлө йүнәлештә тикшереү кәрәк. Дөрөҫ, «Урал батыр»ҙың XX быуат башында ғына ҡағыҙға теркәлгән булыуы әҫәрҙең ҡайһы бер яҡтарын (поэтикаһын, лексик үҙенсәлектәрен, эпостың оҙайлы йәшәү дәүерендә кисергән табыш һәм юғалтыуҙарын) өйрәнеүҙә байтаҡ ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Был нәүбәттән үҙ эпостарының тарихи нигеҙен, поэтикаһын өйрәнеүсе Европа ғалимдарының эше күпкә еңелерәк: англосаксондарҙың «Беовульф» эпосы X быуатта, французларҙың «Роланд тураһын-



05-2001.p65 166 30.07.01, 9:49

дағы хикәйәт»е XII йөҙ йыллыҡ башында, боронғо германдарҙың «Нибелунгтар хаҡында хикәйәт»е XIII быуатта уҡ ҡағыҙға теркәлгән, аҙаҡ күп мәртәбәләр баҫылып сығып, төрлө илдәрҙә тәржемә ителгән.

Йырҙарыбыҙҙы ла киңерәк йүнәлештә өйрәнергә кәрәк ине. Этногенетик, этнокультур бәйләнештәр күҙлегенән улар әле бөтөнләй өйрәнелмәгән тиерлек. Быға тиклем беҙ төп иғтибарҙы оҙон йырҙарға бирергә тырышып, ҡыҫҡа йырҙарҙың, таҡмаҡтарҙың күбеһен күҙ уңынан ысҡындырҙыҡ. Ә бит ҡайһы бер илдәрҙә һәр бер дүрт юллыҡ айырым йыр булып иҫәпләнеп, йөҙәрләгән мең күләмдә баҫылып сыҡҡан (мәҫәлән, Латвияла. Кришьян Ба́рондың латыш дайналары йыйылмаһы үҙе генә ни тора!). Мәҡәлдәрҙе сағыштырма өйрәнеү өҫтөндә эшләгән ғалимдарҙың ҡул аҫтында ла әллә күпме ярҙамсылары бар шул уҡ Балтик буйы илдәрендә, Финляндияла.

Яҙып алынған материалдарҙы тейешле кимәлдә һаҡлау (картотекаға һалыу, Интернет системаһына инеү, архивтарға тапшырыу) тәңгәлендә лә кисектергеһеҙ эштәр күп. Был йүнәлештә сит ил ғалимдарының тәжрибәһен өйрәнеү артыҡ булмаҫ ине.

— **Ә бына әлеге көндә фольклористикаға, ғөмүмән фәнгә йәштәр күпләп киләме?**

— Йәштәр элек тә фәнгә күпләп килде, тип әйтеп булмайҙыр ул. Әммә элегерәк һәләтле йәштәрҙе һайлап алыуға иғтибар етдиерәк ине, шикелле. Бөгөнгө көндә беҙҙең фольклор өлкәһендә был эш үҙ ағышына ҡуйылды булһа кәрәк. Йәштәрҙең фәнгә килеү-килмәүе тормоштағы үҙгәрештәргә лә бәйлелер, тием. Үҙегеҙ беләһегеҙ, ғалимдарҙың эш хаҡы түбән, фатир мәсьәләләре лә үтә ҡатмарлы.

— **Фәнгә дәүләт кимәлендә иғтибарҙы көсәйтергә кәрәктер инде, шулай бит.**

— Эйе, ил ағаларыбыҙ Ризаитдин Фәхретдиндың: «Әҙип һәм ғалимдары булмаған ҡәүем бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләре онотолған халыҡ хәмиәтһеҙ (һаҡлаусыһыҙ), әҙәбиәте булмағаны — рухһыҙ», — тигән һүҙҙәрен хәтерҙәренән сығармаһындар ине.

— **Бер аҡыл эйәһе: «Йәшәүҙең мәғәнәһе нимәлә? — тип һорау — үҙе үк мәғәнәһеҙлек», — тигән. Шулай булһа ла, һорайым әле.**

— Йәшәүҙең мәғәнәһе — тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәүҙә. Мәҫәлән, кесе ҡыҙымды тапҡанда миңә 42 йәш ине. Шул ҡыҙымдың һәр йәшен, һәр бәхетле мәлен мин үҙемдең ғүмерем менән бәйләнем. «Аллаға шөкөр, быйыл да минең балам әсәһеҙ ҡалманы, оло ҡыҙым да үҫә төштө», — тип шатлана торғайным яңы йылға аяҡ баҫҡан һайын. Күҙең менән күкте, ҡояшты күреү, табандарың менән ерҙе тойоу үҙе бәхет түгелме ни?

— **Һеҙ әллә нисә мәҡәл, йыр китабы сығарҙығыҙ. Иң яратҡан мәҡәлегеҙ, йырығыҙ?**

— Мәҡәлем — «Тәрән йылға тыныс аға». Мәшһүр йырҙарыбыҙҙың береһен әйтеп, икенсеһен ҡалдырһам, улар «үпкәләрҙәр» төҫлө.

— **Шулай ҙа?**

— «Буранбай», «Сәлимәкәй». «Тәфтиләү»ҙе тыңлаған һайын ҡурай уйнап ултырған атайым күҙ алдына килә. Бейеү көйҙәрен ишетһәм, Моразымымдың ҡыҙҙар уйындарын хәтерләйем.

— **Фәнүзә апай, ғәҙәттә ижад кешеләренә бирелә торған һуңғы һорауым: алдағы пландарығыҙ ниндәй?**

— Әллә ни ҙур пландарым юҡ, хыялдарым ғыналыр, бәлки. Һуңғы йылдарҙа мин башҡорт халыҡ йырҙарын өс телдә баҫтырып сағарыу идеяһы менән янып йәшәнем. Үҙ тирәмә инглиз теле белгестәрен ылыҡтырып, тәржемәләр эшләтеп, ике китап сығарҙыҡ: «Халҡым йыры» (Флүрә Килдейәрованың кассеталары менән), «Башҡорт халыҡ йырҙары, йыр-риүәйәттәре». Башҡа жанрҙар буйынса артабан да ошо йүнәлештә эшләргә ине теләк. Әле был тәңгәлдә әҙерлек эштәре алып барыла. «Китап» нәшриәтендә мәҡәлдәр томы (башҡорт телендә), «Халыҡ хәтере» тигән монографиямдың тулыландырылған баҫмаһы һәм ҡайһы бер башҡа ҡулъяҙмаларым ята. Шуларҙың донъя күреүен түҙемле рәүештә көтәм.

— **Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт, Фәнүзә Айытбаевна. Хыялдарығыҙ тормошҡа ашһын! Һеҙгә һаулыҡ, яңы ижади уңыштар, түҙемлек теләйем.**

— Рәхмәт! Үҙегеҙгә лә иң изге теләктәр.

*Мәликә Әминева әңгәмәләште.*



05-2001.p65 167 30.07.01, 9:49